***Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ***

# урайсыны йл неп айтыуы

1978 йылдың йәйендә отпуск ваҡытында тыуған яғыма магнитофон күтәреп ҡайттым. Маҡсатым — ололарҙың йырлауын, ҡурайҙа уйнауын яҙып алыу ине. Район үҙәге Баймаҡта әсәйемдең ике туған ағаһы, 1945 йылдың 23 мартында Польша ерендә, Равич ҡалаһын азат иткәндә һәләк булған полк командиры урынбаҫары Әбүзәр Әминевтың әбейе Зәйнәп инәйҙе, тыуған ауылым Таулыҡайҙа һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Салихов Хөсәйен олатайҙы, Мусина Мәрхәбә, Исхаҡова Әскәп инәйҙәрҙе яҙып алдым. Әсәйемдең тыуған ауылы Темәстә өләсәйем Исҡужина Мәхмүзәне, Исҡужина Мөбинә, Сөләймәнова Сәмиғә инәйҙәрҙе, Әмин ауылында Баймөхәмәтова Миңлевафа апайҙы, Ҡолсора ауылында Сыңғыҙов Дәүләтбирҙе олатайҙы һәм башҡа байтаҡ кешенең тауышын таҫмаға яҙҙырҙым. 3 августа Ҡолсорала инем, атайымдың вафаты хәбәре ҡыуып етте һәм сәфәрем туҡталды. Атайымдың йырлауын аҙаҡ яҙырмын, тип уйлағайным, ул оҙон көйҙәрҙе тандыр ғына, үҙенсәлекле моң менән йырлай торғайны, яҙып алырға насип булманы. Мин был ҡиммәтле, бөгөн баһалап бөткөһөҙ тип әйтергә лә мөмкин, фольклор материалдарын шул йылды уҡ Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинетына тапшырҙым, уларҙы студенттар һәм башҡа ҡыҙыҡһыныусылар тыңлай ала, йәғни яҙмалар ҡулланышта.



*Ғәйзулла Сөләймәнов*

Зәйнәп инәй 31 йәшендә тол ҡала. Өләсәйем менән Мөбинә инәй ҙә йәшләй тол ҡалған, ҡартатайым Кәлимулла һәм уның яҡын әҡрәбәһе, Мөбинә инәйҙең йәмәғәте Сәфәр Исҡужиндар — сәйәси золом ҡорбандары. Сәмиғә инәйҙең ире Ғәйзулла Сөләймәнов бик оҫта ҡурайсы ла була, яу ҡырҙарында башын һала. Сәмиғә инәй бик моңло йыраусы ине, “Ҡыҫҡа Урал”, “Сибай”, “Ғилмияза” йырҙары менән бергә, иренә арнап сығарған йырҙарын “Әүестән” йырының көйөнә йырлап яҙҙырҙы. Йырҙы ул йәш сағында мәжлестәрҙә иренең ҡурайына ҡушылып йырлаған куплеттан башланы:

Ҡыҙыл ғына туры ат һимерттем
Ҡазанский ҡыҙыл төлкө өсөн,
Ҡазанский ҡыҙыл да төлкө өсөн.
Ашап-эсәр өсөн беҙ килмәнек,
Беҙ килгәнбеҙ уйын-көлкө өсөн,
Беҙ килгәнбеҙ уйын да көлкө өсөн.
Волга һыуын барып күрһәң ине,
Волга һыуы һары тал микән,
Волга һыуы һары ла тал микән?
Ҡын эсенә һалған еҙ ҡурайы
Ҡайһы ерҙә ятып ҡалды икән,
Ҡайһы ерҙә ятып та ҡалды икән?
Ҡитәр генә булғас, атын еккәс,
Баҫып тороп ҡурай уйнаны,
Баҫып тороп ҡурайҙа уйнаны.
Был һуғыштар оҙаҡ була тиҙәр,
Башым ҡайтмаҫ, тип үк уйланы.
Балаларым минең бигерәк һәйбәт,
Баҡсаларҙа үҫкән гөл кеүек,
Баҡсаларҙа үҫкән дә гөл кеүек.
Шаулап тора немец атомдары,
Яҡты көндәр миңә төн кеүек,
Яҡты көндәр миңә лә төн кеүек.
Окоптарҙа ятып, төштәр күрһәм,
Һинән башҡа берәүҙе күрмәйем.
Шаулап тора немец тауыштары,
Ҡайтып булмаҫ инде, белмәйем,
Ҡайтып булмаҫ инде лә, белмәйем.
Өҫтәремә кейгән ҡара күлдәк
Балаларым кейһен, һүт тине,
Балаларым кейһен дә, һүт тине.
Ҡитәр генә булғас, ҡулды тотоп,
Балаларҙы яҡшы күт, тине,
Балаларҙы яҡшы ла күт, тине.
Дошман ҡулдарына дусар булды,
Сыҡманы ла ҡайтыр уңайы,
Сыҡманы ла ҡайтыр ҙа уңайы.
Ҡын эсенә һалып ҡурай алды,
Тороп ҡалды алты ҡурайы,
Тороп ҡалды алты ла ҡурайы.

Бөгөн Темәстә Әҙһәм Исҡужин исемендәге урам бар, был урамда таулылар араһы, яҡын ағай-энеләр йәшәгән һәм йәшәй. Күренекле шәхестәр, 1923 йылда Мәскәүҙә Бөтә Союз ауыл хужалығы һәм кустар сәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостан делегацияһының етәксеһе, ҡурайсы, тарихсы, үҙе иҫән сағында Һаҡмар-Ирәндек зонаһында йыйындарҙа халыҡ сәнғәте маһирҙарының

бәйгеһен баһалаусылар комиссияһының даими рәйесе Әбүбәкер Хөсәйенов хәҙрәт, Исҡужиндарға фамилия биргән Исҡужа олатайҙың өлкән улы Мәһәҙейҙең ейәне, заманында оҙаҡ йылдар Темәс ауылының имам-хатибы булған, мәшһүр Ғабдулла Сәиди тураһында 1916 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан китаптың авторы Рәхмәтулла Мәһәҙиев, уның улдары, сәйәси золом ҡорбандары, данлыҡлы йыраусы Әбдрәхим Исҡужин, ҡурайсы Абдрахман Исҡужин, беҙҙең замандашыбыҙ, мәшһүр ҡурайсы-остаз Әҙһәм Исҡужиндар ошо аранан. Яу ҡырҙарында башын һалған ҡурайсы Ғәйзулла Сөләймәнов һәм, әлбиттә, уның ҡыҙы, заманында БАССР-ҙың Мәғариф министры Сәбилә Сөләймәнова ла — таулылар араһынан. Йәйге каникулдарҙа әсәй мәрхүмә мине Темәстә атаһы Кәлимулланың нигеҙендә яңы йорт һалып йәшәгән ҡустыһы Рауил ағайымдарға ҡалдыра торғайны, шуға ла таулыларҙың ни хәтлем бер-береһен яҡын күреп йәшәүҙәрен тойоп үҫтем. Олатайҙарҙы, кем һуғышта ҡалған, кем сәйәси золом ҡорбаны булған, күреп булманы. Әбейҙәре — өләсәйем Мәхмүзә, Әҙһәм ағайҙың әсәһе Ғәлимә инәй, Сәбилә апайҙың әсәһе Сәмиғә инәй, партия, совет органдарында оҙаҡ йылдар эшләгән Баймаҡта билдәле шәхес Айрат Сәфәр улы Исҡужиндың әсәһе Мөбинә инәй, Мәһәҙиева Яңылбикә инәй (уның бабайы Әбделғәлим олатай яу ҡырҙарында башын һалған), Әмирханова Файза инәй (бабайы Насип олатай — сәйәси золом ҡорбаны) яҡын әхирәттәр булып йәшәнеләр.



*Сәмиғә инәй Сөләймәнова һәйкәл янында*

Таулыларҙың, хәҙерге тел менән әйткәндә, аураһына ҡыҙығып, ситтән ингән сыуаш ғаиләһе Федоровтарҙы иҫкә алмай булмай. Иван ҡарт минең ҡартатайым Кәлимулла менән яҡын дуҫ булған, улы Борис әсәйемдең бер туған ҡустыһы Рауил ағайым менән аралашты. Бесәнде бергә әҙерләй торғайнылар. Сабынлыҡҡа барһаҡ, Борис ағай ҡурай табып ҡырҡып алып килә лә, Уралды Урал иткән — ҡурай, Юлай, уйна, тиер ине. Ҡурайҙы яһап, уйнап ебәргәндән һуң эш башлайҙар. Таулыларҙа туй булһа, өҫтәлдә Лукерья инәйҙең ҡамыр аштары булыр ине. Ә иң мөһиме — Иван олатай менән Лукерья инәйҙең мәжлестәрҙә икәүләшеп башҡорт халыҡ йыры “Абдулла ахун”ды йырлауҙары. Сығыштары

таулылар араһына эйәрсен булып килгән баланан булған Мотаһар олатай Салихов (әбейе — Йәмилә инәй), Латифа инәй Сиражетдинова (бабайы — Ирғәле олатай) күрше-күләндәре менән яҡын туғандай йәшәне.

Таулылар араһына бәйле бер миҫал килтермәй үтә алмайым. Уны миңә Рәхмәтулла Мәһәҙиевтың ейәнсәре, әйткәндәй, Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар эскадрон командиры Бәҙри Мәмбәтҡоловтың бер туған һеңлеһе, Сибай ҡалаһында йәшәүсе Гәүһәр апай һөйләне. Рәхмәтулла Мәһәҙиев үҙе лә, уландары һәм хатта ҡыҙҙары менән кейәүҙәре сәйәси золомға дусар ителгәс, әбейе Мәфтүхә өләс (изгелектәре өсөн бөтә Темәс халҡы уны шулай атап йөрөтә) ҡараусыһыҙ, ауыр хәлдә ҡала. Исҡужиндар бөтәһе лә шул хәлдә. Әбүбәкер хәҙрәт, илдә барған баш-баштаҡлыҡты күтәрә алмай, ауырып донъя ҡуя, ярҙам итерҙәй кеше юҡ. Яҡын туғанлығы ла булмаған Ишбулат Ҡотлоғәлләмов атлы олатай, еңгә, борсолма, беҙ бар бит әле, тип утын-бесәнен әҙерләп бирә, һәр яҡлап ярҙам итә. Оҙаҡламай Ишбулат олатай үҙе ауырып китә һәм Мәфтүхә өләскә килеп: “Еңгә, ул-был хәл була ҡалһа, үҙем һине тәрбиәләп ҡуйырмын, тип уйлағайным, кәфенлек тә алып ҡуйғайным, ауырып киттем, хәлем самалы, һиңә тигән кәфенлекте алып килдем”, — тип, бәхилләшеп ҡайтып китә, күп тә үтмәй донъя ҡуя.

Һуғыш башланғас, аяғы һынған булыу сәбәпле Ғәйзулла Сөләймәновты хәрби комиссариат бер аҙ саҡыртмай торған. Ул саҡта ун өс йәшлек Әҙһәм ағай Ғәйзулла Сөләймәнов менән бергә бесән әҙерләп ятҡандар. Шаян кеше ине, тип хәтерләй торғайны Әҙһәм ағай. Ҡултыҡ таяғында сатанлай-сатанлай йүгергән була, бына беҙ ошолай атакаға барабыҙ, ти. Немец пуляһы миңә килеп тейә лә, мин ошолай ҡолайым, тип ҡолап күрһәтә...

Әҙһәм ағай Сәбилә апайға атаһы тураһында тағы бер хәтирәне һөйләгән. Был хәл һуғышҡа тиклем булған. Йәйҙең матур бер кисендә Урал (темәстәр көнбайыш яҡлап урман-тау яғын Урал ти, ҡаршы яҡ — Ирәндек) яғынан Темәс урамына дүрт һыбайлы яңғыратып ҡурайҙа уйнап килеп инәләр. Аттары ла, әйтерһең, ҡурай моңон тойғандай, ҡолаҡтарын ҡайсылап, баш ташлап уйнап ҡына киләләр йәнәш. Темәстәр урамға сығып, һоҡланып тыңлай. Ҡурайсылар Ғәйзулла, Сәйғәфәр, Заһретдин, Яхъя ағайҙар уғата дәртләнеп, ажарланып “Порт-Артур”ҙы һыҙҙыра...

Ә быныһын һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, Ҡолсора ауылы уҙаманы, хәҙер инде мәрхүм Йосоп Фазуллин һөйләгәйне. “Ғәйзулла ағайым (әҡрәбәлектәре бар) оҫта ҡурайсы булды. Ҡатыны, Сәмиғә еңгәм ҡоторсаҡ (баҫҡан урынында ут сығара мәғәнәһендә) булды. Ағайым ҡулына ҡурайын алһа, еңгәм бейек ҡуңыслы ботинкаһын, бауҙарын үткәреп, кейеп ала, ә өҫтөндә уның һәр саҡ милли кейем булды. Ағайым ҡурайҙа бейеү көйөн уйнай башлағанын сабыр ғына көтә. Оҙон көйҙәрҙән һуң бейеү көйө башлана, Сәмиғә еңгәм ботинкаларын тыҡылдата баҫып, инде рәхәтләнеп бейей, ҡурайсығамы, бейеүсегәме — кемгә һоҡланырға белмәйһең...”

Рауил ағайымдан ишеткәйнем. Бесәндә Сәмиғә еңгәйҙең кәбәнен ҡойоу беҙҙең өсөн байрам була торғайны, тигәйне. Кәбән башына Сәмиғә еңгәйҙең үҙен мендерәбеҙ, кәбәнде ҡойоп бөткәс, аҫҡа төшөргә арҡан бирмәйбеҙ, йырлатабыҙ. Аҫта йыйылып ултырабыҙ, ишетеп, эргә-тирәләге халыҡ та килә, еңгәй өҫтә



*Сәбилә Сөләймәнова ата-әсәһенең ҡәбере эргәһендә*

йырлай. Туйғансы тыңламайса төшөрмәйбеҙ. Үҙенең дә күңеле бушап ҡалалыр, риза булып килеп төшә.

Сәмиғә инәйҙе бәләкәй саҡтан күреп-белеп үҫтем, бәләкәй, йоҡа ғына кәүҙәле, шәп-шәп атлап йөрөй, һәр саҡ йөҙө асыҡ. Йомшаҡ ҡына итеп һүҙен әйтә, ғөмүмән, ул сәсән телле булды. Темәстәр бер хәлде әле лә ҡыҙыҡ итеп һөйләй: бер килмешәк, күршеһенең тыйнаҡлығынан файҙаланып, күрше яғына инә бара, инә бара үҙенең картуф баҡсаһын киңәйтеп маташа икән. Яҡындан үтеп барған Сәмиғә инәй быларҙың бәхәсен ишетеп туҡтаған, теге һөмһөҙө, минең ерем, тип тауышлана икән. Сәмиғә инәй шунда түҙмәй, ҡайһы яҡтан алып килдең ереңде, тип тегенең ауыҙын япҡан.

Сәмиғә Тимерйән ҡыҙы Сөләймәноваға 1942 йылда иренең үлем хәбәре килә, әммә ышанмай, 1996 йылға тиклем, үҙенең вафатынаса көтә.

Оҙаҡ йылдар эҙләү һөҙөмтәһен бирә: Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы Сөләймәнова, үлем хәбәре килгәндән һуң 69 йыл үткәс, 2011 йылдың март айында, кинйә улы Алмас менән бергә барып, Орёл өлкәһе Ҡолпнянский районы Урынык ауылы эргәһендә атаһының ҡәберен тапты. Яу ҡырында батырҙарса һәләк булған Ғәйзулла Ҡыуандыҡ улы Сөләймәновтың ҡәберенән тупраҡ алып ҡайтып, Темәс зыяратында таулылар эргәһендә ятҡан Сәмиғә Тимерйән ҡыҙы Сөләймәнованың ҡәберенә һалды, ҡәбер ташына атаһының исем-шәрифтәрен, йәшәгән йылдарын, фотоһын өҫтәне. Яугир-ҡурайсы 69 йылдан һуң, тупрағы менән булһа ла, ятҡан кәләше, ағай-энеләре эргәһенә әйләнеп ҡайтты...